# Тыуған яғым оҫталары

Ғафури районының Сәйетбаба ауылында йәшәгән Илһам ағай Байбулдин - тыуған яғымдың оҫталарының береһе. Ул музыка ҡоралдары яһай.

Бер саҡ бесәнгә барғанда Илһам ағай ҡарама ағасын бысып алып ҡайта. Тора-бара оҫта ҡулында был ағас думбыраға әйләнә, һуңынан инде моң да сығара. Тәүге думбыраһы әҙер булғас, икенсеһенә илһамланып тотона ул. Тиҙҙән уға тәүге заказдар килә.

— Йыла ағасын бөгөп, биш думбыра яһаным. Бик матур килеп сыҡмаһа ла, уйнарлыҡ ине, - ти ул.

Әле яңыраҡ Яҡут Республикаһынан заказ алған. Яҡуттарҙың "тансыыр" тип аталған беҙҙең думбыраға оҡшаш инструментын яһауҙы һорағандар. Уларҙың боронғо ҡоралының бар нәмәһе ағастан яһала. Хатта ҡыл тартып торған деталдәренә тиклем.

Илһам ағай халҡыбыҙҙың боронғо уйын ҡоралы дөңгөрҙө лә эшләгән. Быны өсөн йыуан ағасты киҫеп, эсен соҡоп, тышын да, эсен дә буяған. Һуңынан өҫтөнә кәзә тиреһе тарттырып ҡуйған.

Илһам ағайҙы оҫтаханаһында йыш күрергә була. Бер ағасты, эшкәртә, буяй, нимәнелер елем менән беркетә. Аҙна ғына ваҡыт үтер, моңһоҙҙарҙы уйлатырлыҡ, сәсәндәрҙе ҡобайыр әйттерерлек думбыра тыуыр.

Ул миңә лә матур итеп думбыра эшләп бирҙе.

Алтынай ИСХАҠОВА, 5 класы уҡыусыһы.